*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# ЯКТЫ ДОНЪЯНАН БЕР ҘӘ ТУЙМАНЫМ

Халҡыбыҙҙың сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт донъяһы башланышын «халыҡ ижады» тигән йәншишмәнән ала. Шуға ла ҡанбабаларыбыҙҙың мираҫы, аманаты, илаһи ҡөҙрәте менән көнделдәрҙә арбап, быуындарҙан-быуындарға күскән. Ауыҙ-тел ижады оҫталары: ҡурайсылар, йыраусылар, сеңләүселәр, йомаҡ ҡойоусылар менән аралашып, уларҙың күңел һандығында һаҡланған ҡомартҡыларҙы миңә лә ишетергә, яҙып алырға насип булды.

Рухы тере һыуҙай йыр-моң менән һуғарылғанғалыр, йәше һикһәндән уҙған кәрҙәшем Шәмсиә әбей Сафина (Ҡыйғы районы, Иҙрис ауылы) йәшәү йәмен, дәртен башҡаларға өләшеп йәшәне, һәр саҡ алсаҡ, көр күңелле, йор һүҙле булды.

Шәмсиә әбей көйләп ишеттергән «Ай менән Ҡояш» бәйете ҡанбабаларыбыҙҙың боронғо магик ышаныуҙарын һүрәтләндереү, күк есемдәренә табыныу йәһәтенән айырыуса иғтибарҙы йәлеп итә. Бәйеттә йәшәүгә йәм биргән Ай менән Ҡояш данлана, Ай «күгелйем күлмәк», Ҡояш «алһыу ҡыҙыл күлмәк» кейгән, Ер йөҙөн яҡтыртам тип донъяға килгән йәнле, ҡөҙрәтле ҡиәфәттә күҙаллана. Ҡояш йәшәү сығанағы, ризыҡ бүлеүсе, таратыусы итеп тә тасуирлана. Ҡояш — сәсеүлектәрҙе йылытыусы, тәбиғәткә йән өрөүсе иң көслө рух. Рухтарҙың ихтыяры буйынса ҡар, ҡалын боҙҙар ирей, яҙ килә, ямғыр яуа, үлән, иген үҫә... Бәйеттә Ай менән Ҡояш бына шулай йәнләндерелеп һынландырыла.

Бындай мифологик бәйеттәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Шуға күрә лә «Ай менән Ҡояш» бәйете «Саҡ менән Суҡ», «Науруз» бәйеттәре кеүек халыҡ ижадының бер ынйыһын тәшкил итә.

Кеше ғүмеренә, яҙмышҡа, дини инаныуҙарға бәйле рухи мираҫтан Шәмсиә әбей «Әруах» мөнәжәтен көйләп ишеттергәйне. Мөнәжәт «Ай менән Ҡояш» бәйетендәге мотивты дауам итеп, йәшәүҙең аҙағын үлемгә илтеп ялғағандай. Бәйет менән мөнәжәттә Йәшәү менән Үлем, мәңгелек мәсьәләһе сағылыш таба. «Әруах» мөнәжәтендә Хоҙайға ышанмаған, бер ғибәҙәт ҡылмаған, хәйер-саҙаҡа бирмәгән бәндәнең гонаһлы булыуы, ҡараңғы гүргә кергәс, уны хушһынмауы, донъялыҡта тороп ҡалған Шәмси менән Ҡәмәр Маһиҙы ҡабат күрмәйәсәге, яҡтылыҡты — йәшәүҙе юҡһыныуы тасуирлана.

«Йәшлек дәүерем», «Йәтимдәр», «Инә» бәйеттәре ғүмер-яҙмыш, йәшлек-ҡартлыҡ, ата-инә-бала мөнәсәбәттәре мотивтары менән һуғарылған. Улар үткән заман мираҫы ғына булып ҡалмай, асылы менән хәҙерге хәлдәргә лә ауаздаш.

### Ай менән Ҡояш

Айға ла бар был бәйет,
Көнгә лә бар был бәйет.
Әҙерәк әйтеп үтәйем,
Һеҙ итмәһәгеҙ ғәйеп.

Айҡайҙың исеме
Ҡәмәр Маһиҙыр,
Ҡояшҡайҙың исеме
Ҡәмәр Шәмсиҙер.

Исеме Ҡәмәр Маһиҙың
Күгелйемдер күлмәге.
Бөтә Ер йөҙөн яҡтырта —
Уның беҙгә бүләге.

Исеме Ҡәмәр Маһиым
Күгелйем күлмәк кейгән.
Ер йөҙөн яҡтыртам тиеп
Ул бит донъяға килгән.

Исеме Шәмси Ҡояштың
Алһыу ҡыҙыл күлмәге.
Бөтә Ер йөҙөн йылыта —
Уның беҙгә бүләге.

Исеме Шәмси Ҡояшым
Нурланып ҡына килә.
Йоҡламайыҡ шул сағында —
Ул беҙгә ризыҡ бүлә.

Исеме Шәмси Ҡояшты
Барыбыҙ ҙа ярата.
Ул да беҙҙе бик ярата —
Беҙгә ризыҡ тарата.

Исеме Шәмси Ҡояшым
Тыуа ул матурланып.
Ҡиң болонға ризыҡ сәсә
Йәмләнеп, ғорурланып.

Исеме Шәмси Ҡояшым,
Батырлығыңды белгерт,
Йылмайып ҡына тыуып һин
Йәндәргә йылы керет.

Исеме Шәмси Ҡояшым
Батырлығын белгертә:
Ап-аҡ ҡарҙарҙы юҡ итә,
Ҡалын боҙҙо ла иретә.

### Әруах мөнәжәте

Эй ҡәрҙәштәрем, тыңлағыҙ,
Әйтәйем әруах мөнәжәтен.

Ҡаршы торорҙар мункирҙар
Ал яуап алабыҙ тиеп,
Һин гонаһлы бәндә тиеп,
Зинданға һалабыҙ тиеп.

Алдым, артым ҡаранылар,
Ал яуап минән алдылар.
Һин гонаһлы бәндә тиеп,
Зинданға илтеп һалдылар.

Хәйер-саҙаҡа бирмәнем,
Бер ғибәҙәт ҡылманым.
Был әхирәт көндәрендә
Былдай хәлде белмәнем.

Йөҙҙәремде тупраҡ баҫты,
Күҙҙәрем ҡараңғы алды.
Исеме Шәмси, Ҡәмәр Маһи
Донъялыҡта тороп ҡалды.

Ҡараңғы гүргә кергәнмен,
Ҡараңғы төн тип уйланым.
Исеме Шәмси, Ҡәмәр Маһи
Ҡайҙа икән тип иланым.

Ҡараңғы гүргә кергәнмен,
Бер яҡтылыҡ юҡ алдымда.
Исеме Шәмси, Ҡәмәр Маһи
Булмаҫ та инде янымда.

### Йәшлек дәүерем...

Йәшлек дәүерем үтте минең,
Үткәндәрен һис белмәнем.
Инде ҡартлыҡ көнөм етте,
Бер рәхәт тә күрмәнем.

Донъяҡайым туйҙырҙың бит,
Ҡулдин эште ҡуйҙырҙың бит,
Ҡартлыҡ көнөмдө еткереп,
Хәл-көсөмдө бөтөрҙөң бит.

Йәшлек дәүерем үткәненә
Үкенәм дә сабынамын.
Йәшлек кенә дәүеремде
Бигүк кенә һағынамын.

### Йәтимдәр бәйете

Бәләкәйҙән йәтим булғам,
Йәтим булып үскәнмен.
Әле булһа ла мин йәтим,
Йәтимлеккә күскәнмен.

Бәләкәй инем, ҙур булдым,
Йәтим үстем, хур булдым.
Булманы бит атам-инәм,
Бик тә мәх(ү)рүм булдым.

### Инә бәйете

Инә меҫкен үстерәлер
Балам минең, бәгерем, тип.
Бала үҫһә әйтмәй икән
Инәм минең ҡәҙерлем, тип.

Балаҡайым, бәгерем, тип
Ҡараймын нурлы йөҙөңә.
Был ни ғәжәп, был ни хайран,
Ышанмайһың инәң һүҙенә.

Ҡартлыҡ көнөм етте инде,
Хәлем, көсөм бөттө инде.
Балаларҙы үстерҙем дә, —
Улар мәхрүм итте инде.

Ҡартлыҡ көнөң етте нейһә,
Шундай хәлдәр була икән:
Үҙ балаларың үҙеңә
Яуызлыҡ ҡыла икән.

Ҡурған өлкәһенең Баҡай ауылынан Хәбирә апай Талипова ла кеше ғүмеренә бәйле йолаларҙы, ижадты яҡшы белеүе менән хайран итте. Көйләп башҡарылған түбәндәге бәйет-мөнәжәт йәшәү-үлем тураһында уй-фәлсәфә менән һуғарылыуы, әхлаҡ-әҙәп, иман, кешене әхирәткә киткәс тә ҡәҙерләү зарурлығын еткереүе менән фәһемлелер. Уны үлгән ҡәрҙәштәр рухына аяттан һуң уҡыйҙар:

### Әжәл бәйете

Әжәл шәрбәтен бер көн эсербеҙ,
Яҡты донъянан бер көн китербеҙ.
Яҡты донъянан бер ҙә туйманым,
Күпме йөрөһәм дә күңелем тулманы.

Ғазраил килер, йәнемде алыр,
Нурлы йөҙҙәрем һарғайып ҡалыр.
Зифа тәнемде ауырттырмағыҙ,
Оҙаҡ тормамын, ашыҡтырмағыҙ.

Ауыр хәл икән йән биреүҙәре,
Ҡурҡыныс икән гүргә инеүҙәре.
Оҙон сәстәрем, зифа буйҙарым,
Ҡараңғы гүрҙә яңғыҙ нишләрмен?

Ҡараңғы гүрҙә ҡалыр был башым,
Иманым булһын минең юлдашым.
Шатланыр инем кесаҙна үлһәм,
Йомаға ҡәҙәр гүремә керһәм.

Ҡәберем өҫтөнә таш ултыртмағыҙ,
Ағас ултыртып, йәмләндерегеҙ.
Япраҡтар ярыр, ҡоштар һайрарҙар,
Рухым шатланыр, доғалар барыр.

* * *

1979 йылда Ҡаҙағстандың Ҡарҡаралы ауылынан тыуған ағын, ҡан ҡәрҙәштәрен һағынып, Ҡыйғы башында йәшәгән туғаны Ғәлимәне күрергә зар-интизар булып килгән Фатима әбей менән осраштым. Ул 1905 йылда Лағыр ауылында тыуған, яҙмышы ғүмерлеккә йәнтөйәгенән айырған. Йыр-моң менән күңелен йыуатҡан, һағышын баҫҡан. Бәғзеләре минең ҡуйын дәфтәремдә теркәлеп ҡалған. Улар бойоғоу, әрнеү, һағыш тойғоһона тулы.

### Өҙөлә лә үҙәк...

Ағиҙелкәй буйы, Урал тауы
Башҡорт иле тиеп аталды.
Өҙөлә лә үҙәк, яна йөрәк
Ташлап киткәс аҫыл Ватанды.

Ҡайтыр ғына инем тыуған илгә
Ҡанатҡайым минең ҡай(ы)рылған.
Бер беҙ генә түгел, бер һеҙ түгел
Тыуып үҫкән илдән ай(ы)рылған.

Ҡайтмаҫ та инде, эй, был башым,
Хыҙыр Ильяс булһын юлдашым.
Биғәйәт тә генә әрней йәнем,
Кемгә төшөр икән күҙ йәшем.

### Йыраҡтыр илем

Аяныс хәлем, яналыр бәғ(е)рем,
Һис юҡ әмәлем, ҡотҡар маҡжаным.
Үҫтем муллыҡта, ҙур иркенлектә,
Төштөм ғөрбәткә, ҡотҡарығыҙ үҙем.

Йыраҡтыр илем, яңғыҙ мин үҙем,
Моңлолор күңелем, раббым, бир түҙем.
Тыуған илдәрем, йөрөгән ерҙәрем,
Йәмле ҡырҙарым, — ҡайҙағыҙ бөгөн.
Үҙ тиңдәремде күрһәм күҙ илә,
Үҙ тиңдәремә үҙәгем өҙөлә.

### Кемсә белмәҫ хәлемде

Маҙары башҡа кешене
Мин үҙем дошман беләм.
Заһири дуҫ булһа булһын
Эсе ҡара ҡан менән.

Бәнә был көн хөкөмдар юҡ,
Фекерҙәргә ихтыяр.
Һәр урында кәндүмәбән,
Ғаҡылым солтан менән.

Нәкебем яҡшы ине лә
Белмәнеләр ҡәҙерҙе.
Дошманлығын шунан беләм
Бән аларҙың беҙләргә.

Ах итәрмен, уах итәрмен,
Яндырыр ғишыҡ уты.
Сабыр итһәм, һөйләмәһәм,
Кемсә белмәҫ хәлемде.

Хаҡ тәғәлә ғәфү ҡылһын
Барса мөьмин бәндәне.
Араһында мәхрүм итмә
Мин гонаһлы ҡолоңдо.

### Әхмәтсафа бәйете

Алдыма килгән ҡәһәрҙәр
Бер ваҡыт бөтөр микән.
Шул ҡәһәр менән йыһандан
Был башым китер микән.

Уйлаһам үткән ғүмерҙе
Түҙмәй күңелем тула.
Күҙҙәремдән түгелә йәштәр,
Алдымда ҙур күл була.

Ҡайҙа барһам, шунда ос(о)рай,
Яҙмышым зәмһәрире.
Ник ҡарый асырғаналыр,
Йәлләмәйҙер ҙә мине.

Был ҡәһәрҙәр зәмһәрире
Иң элек күрҙе мине.
Яҡшы, рәхәт көн күреүҙән,
Донъянан һүрҙе мине.

Эй әлефтәй зифа буйым
Биҡара булды был көн.
Был бәләләр һин ходадин,
Сабырым урйә кәрим.